«РАҪЛАЙЫМ»

Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса автономиялы коммерцияға ҡарамаған ойошма директоры

Г.Р. ЙОСОПОВА

«КИЛЕШЕЛГӘН»

Башҡортостан Республикаһының мәғариф министры

И.М. МӘҮЛЕТБИРҘИН

**2026 йылда «БАШҠОРТ ТЕЛЕНӘН ХАЛЫҠ-АРА ДИКТАНТ» халыҡ-ара белем биреү акцияһын ойоштороу һәм үткәреү тураһында**

**ПОЛОЖЕНИЕ**

## 1. Дөйөм положениелар

1.1. Был положение 2026 йылда «Башҡорт теленән халыҡ-ара диктант» халыҡ-ара белем биреү акцияһын (артабан – Акция) үткәреү тәртибен һәм шарттарын билдәләй.

1.2. Акция – телгә булған һәр кем өсөн тәғәйенләнгән ирекле һәм түләүһеҙ белем биреү акцияһы.

1.3. Акция Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең 2024 йылдың 29 ғинуарындағы 17-се ҡарары (БР Хөкүмәтенең 05.08.2025 й. № 383 Ҡарары редакцияһында), Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең 2024 йылдың 27 декабрендәге 1618-р һанлы «Башҡорт теле буйынса Халыҡ-ара диктант үткәреү тураһында» бойороғо менән раҫланған. Акция Башҡортостан Республикаһы хөкүмәтенең 2024 йылдың 27 декабренең 1618-р номерлы ҡарары менән раҫланған «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары һәм дәүләт телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү» дәүләт программаһына ярашлы ойошторола.

1.4. Акцияны ойоштороусылар: Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса автономиялы коммерцияға ҡарамаған ойошма һәм Башҡортостан Республикаһының мәғариф министрлығы.

1.5. Акцияның партнерҙары: Башҡортостан Республикаһының мәҙәниәт министрлығы, Башҡортостан Республикаһы матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы, Башҡортостан Республикаһының йәштәр сәйәсәте министрлығы, «Өфө фән һәм технологиялар университеты» юғары белем биреү федераль дәүләт бюджет белем биреү учреждениеһы (артабан – Өфө фән һәм технологиялар университеты), Башҡортостан Республикаһының Мәғарифты үҫтереү институты, «Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)» йәмәғәт берекмәләренең халыҡ-ара берлеге.

1.6. Акцияны әҙерләү һәм уны уҙғарыу буйынса дөйөм эшмәкәрлекте Акцияның ойоштороу комитеты башҡара.

1.7. Ойоштороу комитеты проектты тормошҡа ашырыу өсөн партнерҙар йәлеп итергә хоҡуҡлы.

1.8. Киң мәғлүмәт саралары Акцияның рәсми партнерҙары булып сығыш яһай ала.

1.9. Акция тураһында тулы мәғлүмәт https://bashdictant.ru/ рәсми сайтында урынлаштырыла.

1.10. Акцияның девизы: «Тел – халҡыбыҙҙың рухи байлығы».

1.11. Акцияның рәсми хештегтары:

#башҡорттелендәдиктант

#башдиктант/#башдиктант2026

#диктантпобашкирскомуязыку

#башҡортсадиктантяҙам

1.12. Акция сиктәрендә рәсми сайт: https://bashdictant.ru (шул иҫәптән уның поддомендары), шулай уҡ чат-бот аша @bash_dictant_bot «МАКС» мессенджерында (артабан Чат – бот) эшкәртелгән шәхси мәғлүмәттәр операторы булып Башҡортостан Республикаһының Мәғарифты үҫтереү институты (артабан - Оператор) тора.

1.13. Акцияла ҡатнашыусыларҙың шәхси мәғлүмәттәрен эшкәртеү 27.07.2006 йылғы 152-ФЗ «Персональ мәғлүмәттәр тураһындағы» федераль законға ярашлы тормошҡа ашырыла. Шәхси мәғлүмәттәрҙе эшкәртеүгә ризалыҡ әлеге Положениеның 5.6.3 һәм 5.7.2 пункттарында ҡатнашыусы эшләгән мәлдә алынған тип иҫәпләнә.

## 2. Акцияның маҡсаты, бурыстары һәм принциптары

2.1. Акцияның маҡсаты – киң йәмәғәтселектең башҡорт телен өйрәнеүгә иғтибарын йәлеп итеү, тел мәҙәниәтен үҫтереү, башҡорт телен Башҡортостан Республикаһында, Рәсәй Федерацияһы субъектарында һәм сит илдәрҙә танытыу һәм популярлаштырыу.

2.2. Акцияның бурыстары:

теләге булған һәр кемгә Акция барышында үҙенең белем кимәлен ирекле баһалау мөмкинлеге биреү;

башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү мәсьәләһенә йәмәғәтселектең иғтибарын йәлеп итеү;

башҡорт телен модалы һәм заманса телмәр һәм яҙма коммуникация алымы булараҡ популярлаштырыу;

башҡорт телен өйрәнеүгә ылыҡтырыу.

2.3. Акцияны үткәреү түбәндәге принциптарға нигеҙләнә:

иреклелек: диктантҡа әҙерлек, уны үткәреүҙә һәм яҙыуҙа ҡатнашыу ирекле, теләк буйынса;

асыҡлыҡ: диктант яҙыуҙа йәше, белеме, ижтимағи хәле, инаныуҙары һәм гражданлығы ниндәй булыуға ҡарамаҫтан теләге булған һәр кеше ҡатнаша ала;

мөмкинлек: диктант яҙыу түләүһеҙ, һәр кемгә диктантта ҡатнашырға мөмкинлек, эште тикшереүгә һәм һөҙөмтәләр менән танышыуға гарантия бирелә;

анонимлыҡ: диктант яҙыуҙа ҡатнашыусылар үҙҙәренең шәхси мәғлүмәттәрен күрһәтмәүе лә ихтимал;

компетентлыҡ: диктант тексын билдәләүгә һәм ҡатнашыусыларҙың эшен тикшереүгә танылған эксперттар йәлеп ителә.

## 3. Акцияла ҡатнашыусылар

3.1. Һәр кеше енесенә, расаһына, милләтенә, теленә, сығышына, матди хәленә һәм вазифаһына, йәшәгән урынына, дингә мөнәсәбәтенә, инаныуҙарына, йәмәғәт берләшмәләре ағзаһы булыу-булмауына һәм башҡа хәлдәргә ҡарамаҫтан Акцияла ҡатнаша ала.

3.2. Акцияла ҡатнашыусы башҡорт телен белеү кимәленә ҡарап онлайн йәки офлайн форматта диктант яҙа ала.

## 4. Акция эксперттары

4.1. Ойоштороу комитеты башҡорт теле уҡытыусылары араһынан эксперттар исемлеген раҫлай.

4.2. Экспертлыҡҡа дәғүә итеүсенең дәүләт өлгөһөндәге документ менән раҫланған педагогик һәм/йәки филологик белеме, һөнәре буйынса кәмендә ике йыл эш стажы (документтар менән раҫланған) булыуы мотлаҡ.

4.3. Эксперттарҙың хоҡуҡтары һәм бурыстары:

- ойоштороусыларҙан эш өсөн кәрәкле материалдарҙы һорарға;
- ҡатнашыусыларҙың эштәрен объектив баһаларға;
- электрон базаға баһаларҙы индерергә.

## 5. Акцияны ойоштороу һәм үткәреү тәртибе

5.1. Диктант яҙыу түбәндәге кимәлдәр буйынса ҡаралған:

башҡорт телен башланғыс кимәлдә белеүселәр;

башҡорт телендә иркен аралашыусылар;

башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында аралашыусылар.

5.2. Диктант текстары ойоштороу комитеты тарафынан һайлап алына һәм раҫлана.

5.3. Акция текстары күләме башҡорт телендә иркен аралашыусылар өсөн – 170 һүҙ, башҡорт телен башланғыс кимәлдә белгәндәргә, шулай уҡ башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында яҙыусыларға 150 һүҙҙән артмаҫҡа тейеш. 2026 йылда текст темалары Рәсәй халыҡтарының берҙәмлеге йылы, Башҡортостан Республикаһында ҙур һәм татыу ғаилә йылы һәм башҡорт шағиры, мәғрифәтсе Ғәли Сокоройҙың 200 йыллығына арналған.

5.4. Акцияла ҡатнашыусылар эштәрен ирекле формала ҡағыҙ битенә яҙа. Теләге буйынса фамилияһын, исемен, атаһының исемен, йәшәү урынын күрһәтә ала.

5.5. Акция **2026 йылдың 17 апрелендә 11.00 сәғәттә** (Өфө ваҡыты менән) онлайн һәм офлайн форматтарҙа башлана.

5.6. Диктант «Башҡортостан юлдаш телевидениеһы», «Тамыр» (башланғыс кимәл) телеканалдарында, «Ашҡаҙар» радиоһында, шулай уҡ Акцияның рәсми сайтында, Акцияны ойоштороусыларҙың социаль селтәрҙәрендә күрһәтелә. Рәсәй федерацияһы субъекттарында, сит илдәрҙә, Башҡортостан республикаһы райондарында һәм Өфө ҡалаһы ойошмаларында офлайн-ҡатнашыу өсөн майҙансыҡтар ойоштороу күҙаллана.

5.6.1. **Онлайн формат:**

5.6.2. Акцияның **онлайн форматы** «Башҡортостан юлдаш телевидениеһы», «Тамыр» (башланғыс кимәл) телеканалдарында, «Ашҡаҙар» радиоһында **11.00 сәғәттә** башлана:

**11.00 сәғәттән 11.25 сәғәткә тиклем** – башҡорт телен башланғыс кимәлдә белеүселәр диктант яҙа;

**11.30 сәғәттән 12.00 сәғәткә тиклем** – башҡорт телендә иркен аралашыусылар диктант яҙа;

**12.05 сәғәттән 12.30 сәғәткә тиклем** – башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында диктант яҙа.

5.6.3. Диктантты тура эфир ваҡытында, шулай уҡ рәсми сайттағы һәм ойоштороусыларҙың социаль селтәрҙәре сәхифәләрендәге тура эфирҙың яҙмаһын ҡарап яҙырға һәм эштәрҙе **2026 йылдың 17 апреленең 23.59 сәғәтенә** (Өфө ваҡыты менән) тиклем сайтта («bashdictant.ru») йәки МАКС мессенджерының @bash_dictant_bot чат-боты аша ебәрергә мөмкин.

5.6.4. Онлайн-форматта теркәлгәндә ҡатнашыусы:

- рәсми сайтта урынлаштырылған положение менән танышырға тейеш;
- 152-ФЗ һанлы Федераль законға ярашлы шәхси мәғлүмәттәрҙе эшкәртеүгә ризалыҡ тураһында билдә (чек-бокс) ҡуйырға тейеш;
- ҡатнашыусы сертификатын электрон формала (күрһәтелгән электрон почта адресына йәки Чат-бот аша) алыуға ризалыҡ тураһында билдә (чек-бокс) ҡуйырға тейеш.

5.7. **Офлайн формат:**

5.7.1. Офлайн-форматта Акция 2026 йылдың 17 апрелендә сәғәт 11.00-ҙә майҙансыҡтарҙа башлана.

5.7.2. Офлайн-майҙансыҡтарҙа Акцияла ҡатнашыу өсөн ҡатнашыусыға түбәндәгеләр кәрәк:

Акцияның рәсми сайтына https://bashdictant.ru/ инеп «Майҙансыҡтар» бүлегендә үҙенә уңайлы пункты табып һайларға һәм һайланған майҙансыҡта теркәлергә.

5.7.3. Акция уҙғарылған көндө ҡатнашыусысы билдәләнгән ваҡытҡа һайланған майҙансыҡҡа килә.

5.7.4. Офлайн-майҙансыҡтарҙа диктантты махсус саҡырылған диктор уҡый. Ҡатнашыусылар башҡорт телмәрен белеү кимәленә ярашлы тәҡдим ителгән текстарының береһе буйынса диктант яҙа.

5.7.5. Офлайн-майҙансыҡтарҙа ойоштороусылар ҡатнашыусыларҙы диктант яҙыу өсөн фирма бланктары менән тәьмин итә.

5.7.6. Диктант яҙылып бөткәс, тултырылған бланктар артабан тикшереү өсөн офлайн-майҙансыҡ ойоштороусыһы тарафынан йыйып алына.

5.7.7. Тикшереүгә тапшырылған эштәргә рецензия бирелмәй, эштәр ҡатнашыусыларға кире ҡайтарылмай. Эште тикшереү һөҙөмтәләре буйынса апелляцияға биреү ҡаралмаған.

## 6. Акцияның рәсми сайты

6.1. Акцияны ойоштороуҙы һәм үткәреүҙе мәғлүмәти йәһәттән тәьмин итеү маҡсатында «Интернет» мәғлүмәт-телекоммуникация селтәрендә Акцияның рәсми сайты эшләй.

6.2. Рәсми сайт https://bashdictant.ru/ адресы буйынса урынлашҡан.

6.3. Рәсми сайтта оффлайн майҙансыҡтар тураһында мәғлүмәт һәм тура эфирҙы ҡарауға һылтанмалар бирелә.

## 7. Акцияға йомғаҡ яһау

7.1. Акцияла онлайн ҡатнашыусыларға электрон, офлайн майҙансыҡтарҙа ҡатнашыусыларға ҡағыҙ сертификаттар бирелә.

7.3. Акция һөҙөмтәләре буйынса ойоштороу комитеты офлайн майҙансыҡты ойоштороусыларҙы электрон рәхмәт хаттары менән билдәләй, онлайн форматта ҡатнашыусыларҙың эштәрен тикшереүсе эксперттарҙы рәхмәт хаттары һәм ҡиммәтле приздар менән бүләкләй.